Башҡортостан Республикаһы
Ишембай районы
муниципаль район Советы

453200, Ишембай ҡалаһы, Ленин проспекты, 60
тел.: 3-39-28, 4-19-54

Республика Башкортостан
Совет муниципального района
Ишимбайский район

453200, г. Ишимбай, пр. Ленина, 60
тел.: 3-39-28, 4-19-54

# БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫ ДҮРТЕНСЕ САҠЫРЫЛЫШ ИШЕМБАЙ РАЙОНЫ МУНИЦИПАЛЬ РАЙОНЫ СОВЕТЫ

**ҠАРАР** **РЕШЕНИЕ**

**Башҡортостан Республикаһы Ишембай районы муниципаль районы Советы депутаттарының килемдәре, сығымдары, мөлкәте һәм мөлкәт йөкләмәләре тураһында бирелгән мәғлүмәттәре буйынса үткәрелгән анализ һөҙөмтәләре тураһында**

2008 йылдың 25 декабрендәге «Коррупцияға ҡаршы көрәш тураһында» 273-сө Федераль законының 12.1-се статьяһы положениеларын тормошҡа ашырыу маҡсатынан һәм 2005 йылдың 18 мартындағы «Башҡортостан Республикаһында урындағы үҙидаралыҡ тураһында» 162-се Башҡортостан Республикаһы законының 12.2-се статьяһына, Башҡортостан Республикаһы Ишембай районы муниципаль районы Уставына, Башҡортостан Республикаһы Ишембай районы муниципаль районы Советы секретары Абдуллин Рәмил Миниәхмәт улының «Башҡортостан Республикаһы Ишембай районы муниципаль районы Советы депутаттарының килемдәре, сығымдары, мөлкәте һәм мөлкәт йөкләмәләре тураһында бирелгән мәғлүмәттәре буйынса үткәрелгән анализ һөҙөмтәләре тураһында»ғы сығышын тыңлап һәм тикшереп, Башҡортостан Республикаһы дүртенсе саҡырылыш Ишембай районы муниципаль районы Советы **карар итте:**

Башҡортостан Республикаһы Ишембай районы муниципаль районы Советы секретары Абдуллин Рәмил Миниәхмәт улының «Башҡортостан Республикаһы Ишембай районы муниципаль районы Советы депутаттарының килемдәре, сығымдары, мөлкәте һәм мөлкәт йөкләмәләре тураһында бирелгән мәғлүмәттәре буйынса үткәрелгән анализ һөҙөмтәләре тураһында»ғы мәғлүмәтен иғтибарға алырға.

Совет рәйесе О.М. Агафонов

Ишембай ҡ.

08 август 2019 йыл

№34/431

Башҡортостан Республикаһы
Ишембай районы
муниципаль районы Советы
ҡарарына ҡушымта
08.08.2019й. №34/431

**«Башҡортостан Республикаһы Ишембай районы муниципаль районы Советы депутаттарының килемдәре, сығымдары, мөлкәте һәм мөлкәт йөкләмәләре тураһында бирелгән мәғлүмәттәре буйынса үткәрелгән анализ һөҙөмтәләре тураһында» мәғлүмәт**

Хәйерле көн, хөрмәтле депутаттар һәм саҡырылыусылар!

Муниципаль вазифа башҡарыусылар үҙ килемдәре, сығымдары, милке һәм мөлкәт характерындағы йөкләмәләре, шулай уҡ ҡатындарының (ирҙәренең) һәм бәлиғ булмаған балаларының килемдәре, сығымдары, милке һәм мөлкәт характерындағы йөкләмәләре буйынса Башҡортостан Башлығына мәғлүмәт биреүе «Башҡортостан Республикаһында урындағы үҙидара тураһында» Башҡортостан Республикаһы законының 12.2-се статьяһы менән нығытылған.

Килемдәр, сығымдар, милек һәм мөлкәт характерындағы йөкләмәләр тураһында ошо статьяға ярашлы бирелгән мәғлүмәттең дөрөҫлөгөн һәм тулылығын тикшереү Рәсәй Федерацияһы ҡануниәтенә ярашлы, күрһәтелгән Законға 2-се ҡушымта менән нығытылған тәртиптә Башҡортостан Республикаһы Башлығы ҡарары буйынса Башҡортостан Республикаһы Башлығы Хакимиәте башҡара.

Декларация кампанияһының 2018 йылғы һөҙөмтәләре буйынса, Башҡортостан Республикаһы Ведомство-ара йәмәғәт хәүефһеҙлеге Советына 48 белешмә йүнәлтелгән.

Башҡортостан Республикаһы Ишембай районы муниципаль районы Советының 19 депутаты араһынан бөтәһе лә БК белешмәһен тапшырҙы (шул иҫәптән, ҡатындарына (ирҙәренә) – 15 белешмә, бәлиғ булмаған балаларына – 11 белешмә).

Билдәле формалағы мәғлүмәт Ишембай районы муниципаль районы Советының сайтында 2019 йылдың 1 майында бирелде.

Анализ һөҙөмтәләре буйынса Башҡортостан Республикаһы Ишембай районы муниципаль районы Советы депутаттары тарафынан килемдәр, сығымдар, милек һәм мөлкәт характерындағы йөкләмәләр тураһында мәғлүмәт биреүҙә ҡануниәт талаптарының үтәлеүе асыҡланды. Депутаттарҙың үҙ килемдәре, сығымдары, милке һәм мөлкәт характерындағы йөкләмәләре, шулай уҡ ҡатындарының (ирҙәренең) һәм бәлиғ булмаған балаларының килемдәре, сығымдары, милке һәм мөлкәт характерындағы йөкләмәләре тураһында мәғлүмәт биреүҙә, муниципаль хеҙмәт тураһында ҡануниәткә ярашлы, сикләүҙәр һәм тыйыуҙарҙы боҙоу күҙәтелмәне, Башҡортостан Республикаһы Ведомство-ара йәмәғәт хәүефһеҙлеге Советынан кире һығымталар һәм Ишембай район-ара прокурорынан күрһәтмәләр булманы.